**Тема:** Баязит Бикбайҙың «Ҡарлуғас» драмаһында халыҡтың азатлыҡ өсөн көрәше.
**Маҡсат:** Драманың идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү, әҫәрҙә башҡорт халҡының социаль һәм рухи яктан иҙелеүен һәм уға түҙмәй, азатлыҡ өсөн көрәшен күрһәтеү.
**Йыһаз**: Б.Бикбай портреты, башҡорт яуғирҙары һүрәттәре.

## Дәрес барышы

**Ойоштороу моменты.**

Уҡытыусы: Дәресебеҙ темаһы - Б.Бикбайҙың «Ҡарлуғас» драмаһында халыҡтың азатлыҡ өсөн көрәше. Әңгәмәбеҙҙең башында башҡорт халыҡ йырын тыңлайыҡ. Уның легендаһы сюжеты һеҙгә таныш: ауыл байы үҙ ерҙәрен урыҫ байҙарына һатҡан. Хәҙерге ваҡытта беҙ был ваҡиғалар тураһында тыныс һөйләргә күнеккәнбеҙ. Әммә шул осор халҡы өсөн был ҙур трагедия булған. Оло ҡайғылары, йөрәктәрен һыҡратып, йырҙар ижад итеүгә килтергән.

*(йырҙы тыңлау)*

Уҡытыусы: Был йырҙың идеяһы менән әҫәр идеяһы ауаздаш яҡтары бармы? Яуабығыҙҙы дәлилләгеҙ.

Студент: Йырҙа халыҡ үҙ ерҙәрен юҡһына. Был драманың тәүге шаршауында ла старшинаның помещик Садовскийға һатыуын күрәбеҙ. Халыҡ быға риза түгел, әлбиттә. Улар был ер менән сауҙа итеүгә ҡаршы сыға, үҙ азатлығы өсөн көрәш юлына баҫа.

Уҡытыусы: Шулай итеп, беҙ прологта башҡорт байҙарының урыҫ байҙарына ер һатыуҙарын күрәбеҙ. Белеүебеҙсә, бындай ваҡиғалар ихтилалдарға, баш күтәреүҙәргә сәбәпсе була. Ә драмала һүрәтләнгән осор ниндәй тарихи ваҡиға алдынан?

*(Студент драмала сағылдырған осор тураһында һөйләй)*

Уҡытыусы: Прологта шулай уҡ урыҫ байы Садовский һәм писарьҙың оятһыҙлығы ла күренә. Ә Яҡуп старшина – ғәмһеҙ, грамотаһыҙ, халыҡтан үҙен бик юғары тотоусы кеше булып күҙ алдына баҫа. Шул эпизодтарҙы табайыҡ һәм роллəп уҡыйыҡ.

*(Студенттар уҡыйҙар)*

Был эпизод һеҙҙә ниндәй тойғолар уятты? Байҙарҙың ниндәй эштәре һеҙҙә нәфрәт уятты?

Студент: Купчийға ҡул ҡуйыу барышында Садовский алдай, Старшина ер биргәндә «Ата-баба ғүмере үлсәп эш итмәгән» тигән һүҙҙәре менән киң күңелле кеше булып еңел генә ер бирә. Былар бөтәһе лә аптыратырлыҡ. Ошонда Л.Толстойҙың «Кешегә күпме ер кәрәк?» хикәйәһе иҫкә төшә һ.б.

Уkытыусы: Шулай ер hатыла. Артабанғы вакиғалар ниндәй? Әҫәрҙең конфликты тураhында hөйләгеҙ.

*(Студент hөйләй).*

Уkытыусы: Ошо конфликт геройҙарҙы ике төркөмгә – ыңғай hәм кире геройҙарға бүлә. Ыңғай геройҙар – халыk, үҙ ерҙәре, үҙ азатлығы өсөн көрәшкә күтәреләләр. Был нисек башланған hуң? Халыkтың бер вәкиле Рыҫkол өйө эсенә күҙ hалайыk, улар нисек донъя көтәләр?

*(Студенттар уларҙың тормошо тураhында hөйләйҙәр).*

Уkытыусы: Бындай тормош менән риза булмайынса Рыҫkолдар яуға күтәрелергә әҙерләнәләр. Бында уларға Шатморат kасkын ярҙам итә. Кем ул Шатморат. Кемдәр улар kасkындар?

*(Студенттар kасkындар тураhында hөйләйҙәр. Уларға бәйле йыр-легендалар hаkланыуын да бәйән итәләр)*

Ҡасkындар тураhында көй тыңлау. Тыңлау барышында йырҙың hүҙҙәре уkыла.

Уkытыусы: Шатморат менән шул егеттәрҙең оkшаш яkтарын күрhәтегеҙ.

Уkытыусы: Шатморат был ауыл кешеләрен яуға әҙерләй hәм аҙаkтан белеүебеҙсә, урмандағы kасkындар менән дә етәкселек итә. Әммә Шатморатkа бәйле бында тағын да бер тема – мөхәббәт темаhы асыла. Тик Шатморат менән унның hөйгәне Ҡарлуғасkа Яkуп старшина kул hуҙа, йәштәргә аяk сала. Бер юлы ике kуян тоторға уйлай. Яkуп старшина ни өсөн Ҡарлуғасты алырға уйлай. Шул эпизодты табып уkығыҙ.

*(Студенттар уkыйҙар. Яkуп старшинаның Ҡарлуғасты ни өсөн кәләш алырға уйлауын, унның быға тиклем дә яусылауын, тик Рыҙkолдоң kаршы килеүен hөйләйҙә)* Ошо эпизод Яkуп старшинаның ниндәй характер-hыҙатын аса? *(Яуап)*

Уkытыусы: Ҡарлуғас старшинаға кейәүгә сыkмай kала инеме? Уға был аҙымды яhарға нимә мәжбүр итте?

*(Студенттар Ҡарлуғастың Ваhап менән осрашыу эпизодын уkыйҙар)*

Ҡарлуғастың был kарары тураhында hеҙҙең фекерегеҙ ниндәй? *(Яуап)*

Уkытыусы: Ҡарлуғасты ниндәй тормош көтә? Яkуп старшинаның kатындарына мөнәсәбәте ниндәй? Унның ғаиләhе тормошон hүрәтләүсе эпизодты табып уkығыҙ hәм яуап бирегеҙ.

*(Студенттар уkыйҙар hәм hығымта яhайҙар)*

Уkытыусы: Ҡарлуғас старшинаны ни өсөн үлтерә? Быға нимә сәбәпсе була? Ошо вакиға героиняның ниндәй характер hыҙаттарын аса? Ҡарлуғас исеме есеменә тап киләме?

*(Студенттар яуабы)*

Уҡытыусы: Әҫәр аҙағында халыҡ восстаниеға күтәрелә. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, артабан ваҡиғалар нисек дауам итер ине? (Студенттар үҙ варианттарын әйтәләр)

Уҡытыусы: Беҙҙең белеүебеҙсә, һәр әҫәрҙең идеяһын асыуҙа уның художество эшләнеше лә ҙур роль уйнай. Был драманың ниндәй үҙенсәлектәре бар?

*(Студенттар яуап бирә)*

Уҡытыусы: Һеҙ әйтеп үткән үҙенсәлектәрҙе конкрет миҫалдарҙа ҡарайыҡ. 1-се рәт драмалағы йырҙарҙы таба. Әҫәрҙең идеяһын асыуҙа йырҙың роле ниндәй? 2-се рәт әҫәрҙе геройҙарҙың телмәренә характеристика бирәләр. (мәҡәл-әйтемдәр, фразеологизмдар, йәнле һөйләү стиле).

*(Студенттар дәфтәренә яҙып алалар, характеристика бирәләр, аҙаҡ сығыш яһайҙар)*

Уҡытыусы: Беҙ һеҙҙең менән тағы ниндәй тарихи драмалар уҡыныҡ? Д.Юлтыйҙың «Ҡарағол» драмаһы менән Б.Бикбайҙың «Ҡарлуғас» драмаларын сағыштырайыҡ.Сюжеты, образдар системаһы, идея-тематик йөкмәткеһе буйынса ниндәй оҡшаш яҡтары бар?

*(Студенттар яуабы)*

Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, яҙыусылар ни өсөн тарихҡа мөрәжәғәт итәләр? Беҙ ни өсөн уларҙы өйрәнәбеҙ?

*(Студенттар яуабы)*

Эйе, тарих беҙгә үҙ һабағын бирә, үҙебеҙҙе хөрмәт итергә, тормош ҡәҙерен белергә өйрәтә. Ә ошондай әҫәрҙәр тарих менән тоташтырыусы күперҙәрҙең береһе ул. Ул күперҙәребеҙ, ошондай яҙыусыларыбыҙ барҙа, һеҙ булғанда ватылмаҫ, юғалмаҫ...

*(Студент Б.Бикбайҙың «Ер» поэмаһынан тәүге бүлекте тасуири итеп уҡый.*

Студенттарҙың эшен баһалау.

Дәресте йомғаҡлау.

**С.Мифтаховтың «Һаkмар kыҙы» драмаһында күтәрелгән проблемалар бөгөнгө көндә**

Дәрес – диспут

Маkсат: Драманың идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү; әҫәрҙә күтәрелгән проблемаларҙы тикшереү, студенттарҙы ғаилә тормошона әҙерләү.

Йыһаҙландырыу: С.Мифтахов портреты, «Бәхетле ғаилә» темаһы буйынса коллаж *(студенттар әҙерләй),* дәреслектәр

Дәрес барышы.

Ойоштороу моменты.

Студент ғаилә темаһына бағышланған шиғырҙы тасуири уkый. *(Ул шиғырҙы студент үҙе һайларға мөмкин йә уkытыусы тәkдим итә. Шиғырҙан иң әһәмиәтле тип табылған юлдарҙы таkтаға эпиграф итеп яҙып kуйыла).*

Уkытыусы: Таkтаға kарағыҙ. Иптәшегеҙ бәхетле ғаиләне нисек күҙ алдына килтерә. Ул шуларҙы үҙ коллажында күрһәтергә теләгән. Үҙегеҙ әйтегеҙ әле, ғаилә kайһы ваkытта бәхетле була ала?

*(Студенттар үҙ фекерҙәрен белдерәләр)*

Уkытыусы: Эйе, быны һеҙ, XXI быуат йәштәре, әйтәһегеҙ. Матур ғаилә төҙөргә ынтылыш борон-борондан булған. Әммә «бәхетле» ғаилә төшөнсәһе ваkыт үтә килә үҙгәреш кисерә. Революцияға тиклем ғәҙәти ғаилә тормошо нисегерәк булған?

*(Шуның тураһында студент сығыш яһай. Ул боронғо ғаиләләрҙә ир-аттың мал табыуына, kатындың балалар тәрбиәләп, ашарға әҙерләп, кейем-һалымды хәстәрләүенә ихтибар итә. Ир төрлө эштәр эшләгән. Kатын өйҙә ултырған. һ.б.)*

Уkытыусы: Шулай итеп, илдә революция була, 20-се, 30-сы йылдарҙан башлап kатын һәм ир тиң хоkуkлы, икеһе лә эшләй ала. Һәм бына беҙҙең алда – шул миллионлаған ғаиләләрҙең береһе – Юлай һәм Айһылыу ғаиләһе. Әҫәрҙең сюжет нигеҙендә – уларҙың тормошо. Шуның тураһында һөйләгеҙ әле.

*(Студент драманың сюжетын һөйләй).*

Уkытыусы: Һеҙҙең белеүегеҙсә, һәр драманың нигеҙендә конфликт ята. Был драманың конфликты ниндәй?

*Студенттар үҙ фекерҙәрен әйтәләр һәм уkытыусы етәкселегендә ошондай һығымтаға киләләр:* Балаға, ғаиләгә, дуҫлыk менән мөхәббәткә төрлөсә kараштары, үҙ-ара аңлаша алмауҙары арkаһында Айһылыу менән Юлайҙың араһында аңлашылмаусанлыk, конфликт тыуа. Схематик рәүештә шулай күрһәтергә мөмкин:

Юлай Айһылыу

Асия Йәркәй

ғаилә мөхәббәт һәм дуҫлыҡ,

бала

Уҡытыусы: Юлай һәм Айһылыу мөнәсәбәттәре ҡырҡыулаша. Уларҙың фекерҙәре төрлө. Ана шуны күрһәтеүсе эпизодтарҙы табып уҡыйыҡ.

*(Студенттар Айһылыу менән Юлай араһындағы бәрелеш булған урындарҙы табып ролләп уҡыйҙар)*

Уҡытыусы: Был проблемаға Юлай нисек ҡарай? Уның фекерендә дөрөҫлөк бармы? Кем нисек уйлай?

*(Студенттар фекерен тыңлау).*

Уҡытыусы: Айһылыу тормошҡа нисек ҡарай? Бәлки, ул хаталаналыр? Бәлки, уға өйҙә ултырырға, бала ҡарарға кәрәктер? Үҙ фекерегеҙҙе иҫбатлар өсөн, драманан тағы ла уларҙың башҡа монологтарын табып уҡығыҙ.

*(Студенттар фекер алышалар).*

Ә һеҙ үҙегеҙҙе уларҙың урынына ҡуйып ҡарағыҙ.

*(Егеттәр Юлай тураһында, ҡыҙҙар Айһылыу хаҡында һөйләйҙәр, үҙҙәрен уларҙың урынына ҡуйып ҡарайҙар).*

Уҡытыусы: Бына һеҙ Юлайҙы ла яҡлайһығыҙ, Айһылыуҙы ла дөрөҫ эшләй тиһегеҙ. Нисек уйлайһығыҙ, ошо конфликт мәңге булдымы икән? *(Студенттар революцияға тиклем ғаилә эсендә мөнәсәбәттәр ҡалыплашҡан булыуы тураһында иҫкә төшөрәләр. Конфликттың яңы мөнәсәбәттәр урынлашыуы һөҙөмтәһендә булыуын әйтәләр).* Ә хәҙерге ваҡытта был проблемалар – ҡатын һәм ирҙең эшләүе, уларҙың тиң хоҡуҡлы булыуы хәл ителгәнме? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

Уҡытыусы: Һеҙҙең иптәшегеҙ «Ватандаш» журналында «Ҡатын-ҡыҙ һәм хәҙерге донъя» рубрикаһында сыҡҡан мәҡәләләрҙе уҡыны, һығымта яһаны һәм һеҙҙе лә шуның менән таныштыра.

*(Студент сығышында хәҙерге көндә ҡатын-ҡыҙҙың бөтә эштәрҙә лә эшләүен, төрлө вазифалар башҡарыуын бәйән итә. Шуның һөҙөмтәһендә ҡатын-ҡыҙҙарҙа ауырыуҙар күбәйеүе, илдә балалар һаны кәмеүе, ҡайһы бер балаларҙың әсә тәрбиәһе етешмәүе арҡаһында (сөнки әсәләр эштә!) әхләки яҡтан түбән булыуы, бының наркоманияға һ.б. насар эҙемтәләргә килтереү мөмкинселеге хаҡында һөйләй. Ҡатын-ҡыҙҙар араһында үткәрелгән һөҙөмтәләрен дә еткерә).*

Уҡытыусы: Күреүебеҙсә, утыҙынсы йылдарҙы С.Мифтахов күтәргән проблема хәҙер ҙә, етмеш йыл үтеүгә ҡарамаҫтан, актуаль ҡала килә.

Беҙ был драмала күтәрелгән проблеманың берәүһе тураһында һүҙ алып барҙыk. Ә Юлай – Асия, Айһылыу – Йәркәй мөнәсәбәттәре лә һеҙҙә, йәш кешеләрҙә, kыҙыkһыныу уятkандыр. Асияның Юлайға kарата мөнәсәбәте хаkында һөйләгеҙ. *(Студент һөйләй).* Йәркәй менән Айһылыу араһында мөнәсәбәттәр нисек? Йәркәй ысын дуҫмы? *(Студент яуабы)*

Күреүебеҙсә, Асия ла, Йәркәй ҙә ысын күңелдән һөйәләр һәм үҙ мөһәбәттәрен белдерәләр. Һеҙ быға нисек kарайһығыҙ? Улар дөрөҫ эшләйме? Юлай һәм Айһылыуҙың позициялары хаkында ни әйтерһегеҙ?

*(Студенттар фекер алышалар)*

Уkытыусы: Эйе, тормошта кешеләр араһында мөнәсәбәт шундай kатмарлы, kапыл ғына яуап биреүе лә ауыр. Әммә халыk борон-борондан ошо фекерҙе яkлаған: кешене бәхетһеҙ итеп, үҙең бәхетле була алмаҫһың. Ғөмүмән, халыk йыйған аkыл иң kиммәтлеһе ул. Уларҙың фекеренә kолаk һалып эш итеү дөрөҫ.

Беҙ һөйләшеүебеҙ башында ир менән kатындың ғаиләләге роле тураһында, бәхетле ғаиләләр тураһында һүҙ алып барҙыk. Юлай һәм Айһылыу тормошондағы, төрлө ауырлыkтарҙы, уларҙың еңеп сығыуҙарын күрҙек. Уларҙың еңеүе сәбәбе нимәлә?

*(Студенттар был ике йәш кеше бер-береһен ысын күңелдән һөйә, шуға күрә kыйынлыkтарҙы үтеп сыға алдылар тигән фекергә килергә тейештәр)*

Уkытыусы: Эйе, заманалар ниндәй генә булмаһын, кеше ниндәй генә осорҙа – боронмо, хәҙерме, киләсәктәме йәшәмәһен, ул үҙенең һөйгәне менән генә бәхетле ғаилә kора ала. Тик шул саkта ғына ғаилә ауырлыkтарға бирешмәйәсәк.

Дәресте йомғаkлау, студентарҙың эшен баһалау, өй эшен биреү.

# Ғ.Сәләмдең «Бала» поэмаһы буйынса дәрес-хөкөм.

**Маkсат**: Ғ.Сәләм «Бала» поэмаһының идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү, студенттарҙы поэманы анализлау күнекмәләрен үҫтереү, уларҙы ғаилә тормошона әҙерләү.

**Йыһаз:** Әсә һәм бала темаһы буйынса күргәҙмә, Ғ.Сәләм портреты, дәреслектәр.

**Дәрескә әҙерлек:**

*1. Уkытыусы эшмәкәрлеге:*

а) төркөмдө төркөмсәләргә (подгруппаларға) бүлә, һәр береһенә һорауҙар, эштәр бирә: 1-се төркөм – «хөкөм итеүселәр» (судья), хөкөм процесын (планын) әҙерләй, геройҙарға объектив баһа бирергә мәғлүмәт йыя. 2-се төркөм «прокурорҙар» геройҙарҙы (Сәйҙел, Зәйнәп, ) тәнkитләргә материал йыя. Дәлилләр өсөн поэманан өҙөктәр таба, тасуири уkырға әҙерләнә. 3-сө төркөм «Яклаусылар» геройҙарҙы яkларға әҙерләнә. Поэманан материалдар табалар, тасуири уkырға әҙерләнәләр.

б) сығыш яһаусыларға ярҙам итә.

в) дәрес план-конспектын яҙа.

*2. Студент эшмәкәрлеге.*

а) Поэманы уkый. Дәреслектәге тәнkит мәkәләһе менән таныша.

б) Тасуири уkырға әҙерләнә.

в) бирелгән һорауҙарға иптәштәре менән яуап әҙерләй.

г) Бала тураһында шиғырҙар, мәkәлдәр, йырҙар һ.б. материалдар таба.

ғ) 1-се сығыш яһаусы «Бала – тормош сәскәһе» темаһы буйынса күргәҙмә әҙерләй. 2-се сығыш яһаусы «Хәҙерге көндә балалар һаны артамы?» темаһы буйынса сығыш яһарға әҙерләнә.

Дәрес барышы.

Ойоштороу моменты.

Уkытыусы: Беҙ бөгөн Ғ.Сәләмдең яҙған «Бала» поэмаһы буйынса һөйләшәсәкбеҙ. Һеҙгә өйҙә бала тураһында үҙегеҙгә оkшаған шиғырҙар, йырҙар, башkорт халыk ижадынан миҫалдар табырға kушылды. Шуларҙы уkығыҙ. *(Студенттар уkыйҙар).*

Уkытыусы: Күреүебеҙсә, бик борондан бирле кешеләр балаға айырыуса ҙур ихтирам, һөйөү менән kараған.Бала – тормош сәскәһе икәнен элек тә, хәҙер ҙә, киләсәктә лә әйткәндәр, әйтәләр һәм әйтәсәктәр ҙә. Бының турала шағирҙар ҙа,

рәссамдар ҙа, йырсылар төрлө әҫәрҙәр ижад иткәндәр. Һеҙҙең иптәшегеҙ балаға бағышланған күргәҙмә әҙерләне. Уға һүҙ бирәйек. *(Студент картиналарҙың исемдәрен, авторҙарын әйтә, улар тураһында һөйләй)*
Уҡытыусы: Шағир Ғәлимов Сәләм дә был темаға мөрәжәғәт иткән. Ул 19 йылда «Бала» поэмаһын яҙған. Исеме әйтеп тороуынса, поэмала һүҙ бала, ғаилә хаҡында барасаҡ. Уның сюжетын ҡыҫҡаса ғына һөйләп үтәргә кәрәк. *(Студент, поэма буйынса яҙған цитаталы планына нигеҙләнеп, әҫәрҙең сюжетын ҡыҫҡаса һөйләй).*
Уҡытыусы: Беҙ дәресте дәрес-хөкөм тип атаныҡ. Әлбиттә, ғаиләләге быңдай ҡарар ҡабул итеүҙәре өсөн хөкөм итмәйҙәр. Әммә тормошта яҙылмаған ҡанундар була, кеше үҙ-үҙен хөкөм итә, ә ҡайһы саҡ яҙмыш үҙе – хөкөм итеүсе. Беҙ бөгөн дәрестә шундай хөкөмдә ҡатнашабыҙ.Төркөм 3 төркөмсәгә бүленә: 1-сеһе – «хөкөм итеүселәр» (судья), 2-селәр – «прокурорҙар», 3-сөләр – «яҡлаусылар»
Дәресте алып барыу өсөн «хөкөм итеүсе»гә һүҙ бирәбеҙ.
Хөкөм итеүсе: Бөгөнгө һөйләшеүебеҙ Сәйҙел һәм Зәйнәп, Әршит, Нәзирә, Вәлишиндәр хаҡында. Беренсе геройыбыҙ – Сәйҙел. «Прокурорҙар», һүҙ һеҙгә.

«Прокурорҙар»ҙың маҡсаты – Сәйҙел һ.б. геройҙарҙың кире яҡтарн әйтеү. Улар поэмаға таяныһ дәлилдәр килтерәләр. Шул уҡ ваҡытта студенттар тасуири итеп уҡырға тейештәр.

«Яҡлаусылар» Сәйҙелдең ыңғай яҡтарын, яңылыш аҙымға нимәләр сәбәпсе булыуын әйтәләр.

Ошондай уҡ һөйләшеү Зәйнәп, Әршит хаҡында бара.
Хөкөм итеүсе: Тормошобоҙға күҙ һалайыҡ. Хәҙерге көндә балалар һаны нисек, был операцияға (абортҡа) барыусылар бармы һәм уның эҙемтәләре ниндәй? Тикшереүсебеҙгә һүҙ бирәйек. *(Студент гәзит-журналдарға, статистикаға нигеҙләнеп, сығыш яһай)*
Хөкөм итеүсе: Нәзирә хаҡында ниҙәр әйтерһегеҙ? *(Студент Нәҙирә хаҡында өҙөктө уҡый)*
«Прокурорҙар» һәм «Яҡлаусылар» сығыш яһайҙар.

(Әлбиттә, Нәзирәнең, баланан баш тартмайынса, уны табып, үҫтереүе маҡтауға лайыҡ. Ҡатын көслө шәхес һәм «ғаилә бәхетен күрергә уға һис шикһеҙ насип буласаҡ. Тик, «прокурорҙар» Нәзирәнең ғәйебен нимәлә күрергә мөмкиндәр һуң? Йәштәрҙең үҙ фекерҙәре булырға мөмкин. Әммә атаһыҙ үҫеүсе балаға тормошта ауырыраҡ буласаҡ. Ошондай шикләнеүҙәрен белдерә алалар).

Хөкөм итеүсе: Вәлишин тураһында һүҙ бирелә. *(Вәлишин хаҡындағы өҙөктәрҙе бер студент уҡый)* «Прокурорҙар» һәм «яҡлаусылар» сығыш яһайҙар.
Хөкөм итүсе: Бөтә геройҙар тураһында ла фекерҙәрегҙҙе тыңланыҡ. Балалар – беҙҙең киләсәгебеҙ, бәхетебеҙ, өмөтөбөҙ икәненә яҡшы төшөндөк. Тимәк, йәш сакта бындай хаталарҙан һаҡ булырға кәрәк. Балаларҙы үлтермәҫкә, уларҙан баш тартмаҫҡа, бындай гөнаһтан алыҫ торорға!
Уҡытыусы: Бөгөнгө хөкөмдә ҡатнашыусыларға ҙур рәхмәт. Алда әйтеүемсә, кешене яңылыш аҙымы өсөн йә үҙенең выждан ғаҙабы, йә яҙмыш үҙе хөкөм итә. Беҙҙең геройҙарыбыҙҙы хөкөмдөң ике төрөнә лә дусар булалар. Әммә поэма бәхетле тамамлана. Һеҙҙә ниндәй хистәр уятты был ваҡиғалар? *(Студенттар яуабы)*
Уҡытыусы: Поэмала күтәрелгән проблемаға ҡарата шағирҙың үҙ ҡарашы бар. Поэманан өҙөк тыңлайыҡ әле. *(Студент өҙөк уҡый).* Был юлдар менән автор ни әйтергә теләгән? Ағастың һары япрағы нимәне символлаштыра? Һеҙ уның фекере менән ризалашаһығыҙмы?

Поэмала күтәрелгән проблемалар бөгөнгө көн өсөн әһәмиәтлеме? Һеҙ үҙегеҙгә ниндәй һығымта яһанығыҙ?
Һығымта яһау.
Студенттарҙың эшен баһалау.